Сыңғыҙ ауылының 1023-сө һайлау участкаһындағы һайлауҙар ауыл халҡы, килгән ҡунаҡтар өсөн ысын байрамға әүерелде.Һайлау участкаһында иртәнге 8 сәғәттә имам -хатиб Акрам
Туйсин фатихаһын биреп тәүге һайлаусыларҙы ҡабул итте. 3 йыл рәттән тәүге һайлаусы былып Таңһылыу инәй Мортазина килә. Ауыл үҙешмәкәрҙәре, мәктәп уҡыусылары тарафынан зур концерт күрһәтелде, аҙағынан Баймаҡ Халыҡ ижады үҙәге артистары бай йөкмәткеле концерт менән ауыл халҡын ҡыуандырҙы. Йәрминкә, һатыу ойошторолдо. Солтангильдина Рәйлә Базарбай ҡыҙы үҙенең ҡул эштәренән күргәҙмә ойошторҙо һәм һаҡал эшләү серҙәрен өйрәтеп мастер-класс үткәрҙе.
Һайлаусылар араһында Шахморатова Флүрә 100-се, Уразбаева Зөлхизә 200-сө һайлаусы тип билдәләнде һәм уларға иҫтәлекле бүләк тапшырылды.